Файза Мәғәсүмова

# Сөрөм итә аҡ болот

*Шиғырҙар*



Зәйнәб Биишева исемендәге “КИТАП” нәшриәте

ӨФӨ · 2012

УДК 821.512.141-1-93
ББК 84 (2 Рос = Баш)-5
М 93

*Рәссамы Глеб Голубев*

**Мәғәсүмова Ф. З.**
М 93 Серем итә аҡ болот: шиғырҙар. — Өфө: Китап, 2012. — 24 бит.
ISBN 978-5-295-05528-7

Был китапта кескәйҙәр өсөн ҡыҙыҡлы һәм мауыктырғыс шиғырҙар тәҡдим ителә.

**УДК 821.512.141-1-93**
**ББК 84 (2 Рос=Баш)-5**

© Мәғәсүмова Ф. З., 2012
© Голубев Г. Е., һүрәттәр, 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

**ТП—183/12**
**ISBN 978-5-295-05528-7**

## ТУПҠАЙ

Тәгәрәй туп, үҙе көлә:
«Мине тота алмаҫһың».
Йүгерә торғас, арыны,
Йәне көйҙө Алмастың:

«Хәҙер, хәҙер тотормон,
Мин дә һине отормон!»
Аңғарманы тоҙаҡты,
Соҡорҙағы күләүеккә
Тупҡай барып юлыҡты...



## ЗӘҢГӘР ТАҪМА

Зәңгәр таҫма һатып алды
Әсәйем миңә:
— Күҙҙәрең дә зәңгәр, ҡыҙым,
Килешер һиңә, —
Тиеп үреп ҡуйҙы сәсем
Таҫмалар менән,
Тышҡа сыҡҡас, көнләштеләр
Дуҫтарым минән.



## ЯЛҠАУ ГӨЛКӘЙ

Битен йыуырға Гөлкәйҙең
Ялҡауы килде бөгөн,
Әсәһе күреп ҡалды ла
Һораны:



— Ҡыҙым, Гөләм,
Битең йыуҙыңмы бөгөн?
Гөлкәйҙең яуап әҙер:
— Иртә таңда йыуыналар,
Төш ауған, әсәй, хәҙер!

## ӨЛӘСӘЙҘӘ

Өләсәйгә мин ҡунаҡҡа
Килдем ҡаланан.
Самауыр ҡуйҙы өҫтәлгә,
Тәмле бәлеш баландан,
Сәксәге лә, шәрбәте лә,
Сөсө генә буҙа ла.
Аптырайым...
Өләсәйем шундай уңған,
Оло йәштә булһа ла!

## ӨЙРӘНДЕМ ЭШКӘ

Өйрәндем мин әсәйемдән
Тәмле аш бешерергә,
Хәҙер инде ҙур үҫтем,
Әсәй эшкә киткәндә лә,
Хужалыҡта мин үҙем...

Кескәй генә бесәйем бар,
Кәртәлә — тауыҡтарым,
Һарайҙа ла мине көтә
Ат, һыйыр, һарыҡтарым.

Бесән һалам, һыу эсерәм,
Тауыҡтарға ем һибәм,
Өйҙә лә ялтырап тора
Йыуылған һауыт-һабам.



Маҡтай мине әсәйем дә,
Бесәйем дә бик риза,
Мал-тыуар ҙа бик ҡәнәғәт:
— Рәхмәт, — тиҙәр, — Луиза!

## ГӨЛДӘР

Өйҙөң эсен йәмләндереп,
Наҙлы гөл сәскә атты.
Күрегеҙсе, ҡыуаныстан
Балҡып торған Гөлшатты:

«Әсәй, әсәй, ҡара! — ти ул, —
Гөлдәрем сәскә атты,
Моғайын да, улар беҙҙең
Өйөбөҙҙө оҡшатты».

## РӘСИЛӘ

Концертҡа тип, әҙерләнә
Бөгөн Рәсилә.
Уның балҡыған йөҙөнән
Нурҙар сәселә.

Шатлана, сөнки тәү тапҡыр
Сәхнәгә сыға.
Бар халыҡ ихлас ҡул сабыр
Кескәй йырсыға.

## ТЫУҒАН КӨН

Тыуған көнөнә саҡырҙы
Әхирәтем Әминә.
Шулай уҡ уны ҡотларға
Килгән күрше Йәмилә.



Әминәне ҡотлағандай,
Тышта бызау: «Мө-ө! — тине. —
Һин бит аҡыллы ҡыҙыҡай,
Һәр саҡ шулай бу-ул», — тине.

## КҮБӘЛӘК

Күбәләкте баҫтырып
Арыны Батыр,
Хәҙер ҡайтыр ҙа
Йоҡларға ятыр.
Ә күбәләк арымай,
Һаман да оса,
Яландағы сәскәләрҙе
Һөйөп ул ҡоса.



## ИЗГЕ ЭШ

Күгәрсендәр: «Гөр-гөр», — тиҙәр
Иртәнән бирле.
«Әллә мине көтәләр?» — тип
Уйлай Ишбирҙе.
Тышҡа сыҡты, улар һаман:
«Гөр-гөр-гөр», — тиҙәр.
Бәлки, ҡыуып ебәрәйем,
Улар китерҙәр. Юҡ,
Ашарға ем һалайым,
Рәхмәт алып ҡалайым.

## ҺАҠТА

Үрмәле гөләм үрелеп
Ҡарана тирә-яҡҡа;
Ә эргәһендәге кактус,
Әйтерһең, тора һаҡта.

## КАРАНТИН

Әллә нишләп йоҡо менән
Бигерәк дуҫ Мирзаян;
Унның өсөн бигерәк тә
Иртән тороуы ҡыйын.

Бөгөн дә торғоһо килмәй —
Йоҡолары туйманы.
«Нисек итеп был мәктәпкә
Бармаҫҡа?» — тип уйланы.

Әсәһе, килеп янына,
Һорай:
— Улым, ни булды?
— Төштә күрҙем: мәктәп бөгөн
Карантинға ябылды.



# АЛМА

Алма сәскәһен ҡойған
Аҡ ҡарҙай итеп ергә,
Хуш еҫтәр генә бөркөп,
Өйөмә килеп кергән.

Кескәй Динис аптырай:
— Ниңә ҡойола сәскә?
— Көҙөн тәмле алма бирер, —
Тине йылмайып әсә.





## СӘСТӘРЕМДЕ ТАРАҒАС

— Өтәскәйем, тарағыңды
Биреп тор әле миңә,
Сәстәремде тарармын да
Ҡабат илтермен һиңә.

## ҠОЛОНҠАЙ

Ҡолонҡай аҡланда
Эй саба, ҡыуана.
«Ҙур үҫте ҡолоном», —
Тип әсә йыуана.



## ЗӨБӘЙҘӘ

Ҡурсағына күлдәк текте
Зөбәйҙә бөгөн.
Шундай ыҡсым килеп сыҡты —
Тапмаҫһың йөйөн.

Итәгендәге таҫмала —
Йәйғор төҫтәре.
«Был — иң матур ҡурсаҡ!» — тиеп
Әйтер дуҫтары.

## БАЛАН

Ап-аҡ сәскә атты быйыл
Баҡсалағы баландар.
— Емеше лә күп булыр, — тип
Ҡыуандылар балалар. —

Әсәйебеҙ бешерер
Бәлештәр беҙгә,
Ҡыуанышып, Алла бирһә,
Ашарбыҙ бергә-бергә!

## ТЕРПЕ

Терпе япраҡтарҙы тапай
Ялан аяҡ,
Ҡулында оло кәрзине,
Ағас таяҡ.
Ҡурай еләге йыя ул
Дуҫтарына,
Тәлгәш-тәлгәш емеш төшә
Устарына.



## КӘЗӘ ЙЫРЫ

«Мине яҡшы ҡарағыҙ,
Яҙҙар еткәс, тарағыҙ:
Мики-ки-ки, ми-ки-ки,
Иң шәп дебет минеке!»

## ПАР ҠАНАТ

— Һалҡын түгелме һеҙгә
Ояғыҙҙа, ҡошсоҡтар?
— Әсәй ҡанаты аҫтынан
Күренә тик суҡыштар.

— Нишләрһегеҙ, әгәр ҙә
Яуһа ҡойма ямғырҙар?
— Ағастарҙың япрағы
Тамсыларҙан ышыҡлар.

— Әсәйегеҙ ҡайтмаһа,
Ҡойолһа әгәр япраҡ?
— Һис кенә лә ҡурҡмайбыҙ,
Һәммәбеҙҙә — пар ҡанат.



## АҠ КӘЗӘ

Ниндәй матур кәзәкәй,
Болоттан да аҡ.
Баҫыу ситендә йөрөп,
Туйҙыра тамаҡ.

Кисен ҡайтҡас, ул әйтер:
—Хужабикәм, мә-ә-ә,
Шифалы һөт килтерҙем
Баҫыуҙан һиңә-ә-ә...



## СЕБЕШТӘР

Кескәй генә себештәр,
Эй, матур шул үҙҙәре.
Кәртә буйлап йүгерәләр,
Сип тә сип — бар һүҙҙәре,
Асылмаған телдәре!

## ЭШҺӨЙӘРҘӘР

Йырғанаҡтар йырҙыҡ бөгөн
Ҡустым менән икәүләп.
Күктә ҡояш, нурын сәсеп,
Ҡарап торҙо иркәләп.

Эшебеҙҙе яратҡандыр,
Бик уңғандар, тигәндер.
Моғайын да, был икәү
Бер туғандар, тигәндер.

## Яҙ

Яҙ миҙгеле ниндәй гүзәл —
Нурҙарын һибә ҡояш;
Бар тәбиғәт йоҡоһонан
Уянып, кирә ҡолас.

Баш ҡалҡыта умырзая,
Япраҡ яра ағастар.
Беҙҙе моң менән һыйларға
Әҙерләнәләр ҡоштар.





## СЫЙЫРСЫҠ

Сыйырсыҡтар ояланы
Мин эшләгән ояға,
Көн дә иртән һайрай улар
Хайран ҡалып донъяға.

## ТЫП ТА ТЫП

Ҡыйыҡтарҙан тама тамсы
Тып та тып, тып та тып...
Яҙҙар быйыл иртә килә,
Көндәр тора йылытып.

## ҺАБАНТУЙҘА

Һабантуйҙа ярышта,
Эй, халыҡ күп ҡатнашты,
Әйтерһең дә, ҡарап торһаң,
Бал ҡорттары ҡайнашты:



Берәүҙәр атта ярыша,
Көрәшәләр көслөләр,
Сәхнәлә йыр-моң ағыла,
Арыу белмәҫ төҫлөләр.
Шау-гөр килгән һабантуйға
Тәбиғәт тә көнләште,
Күк көмбәҙен гөрһөлдәтеп
Йәшен сәләм өләште.

## ЯМҒЫР

Ямғыр килә алыҫта,
Аяҡтары бик оҙон.
Онотмаған, алып йөрөй
Үҙе менән ҡоҙоғон.
Ҡоҙоғонда шифалы һыу —
Ҡойондорор урманды,
Туйындырыр йәшелсәне,
Йыуып уҙыр урамды.

## КИС

Тау башында томан ята
Мамыҡ кеүек уралып,
Тынып ҡалған ауылымдың
Кескәй генә урамы.

Ара-тирә эттәр өрә,
Шәмдәр ҡабыҙған өйҙәр,
Хәҙер миңә өләсәйем
Матур әкиәт һөйләр.

## ЛӘЙСӘН

Ләйсән ямғыр яуып үтте
Беҙҙең ауыл өҫтөнән;
Туҙандарҙы төшөрҙө ул,
Сайып, тауҙар битенән.

Ҡояш апай, нурҙан ҡойоп,
Йәйғор элде офоҡҡа.
Ауылыбыҙ оҡшап ҡалды
Килен төшөргән йортҡа.

## ҠОШСОҠ

Һоҡландым мин баҡсабыҙҙа
Һайраған бер ҡошсоҡҡа.
Уны тыңлап, бар донъяны
Алғым килде ҡосаҡҡа.

Өләсәйемдән һораным:
— Ҡайҙан уларҙа был моң?
Шулай шәп һайрарға ҡоштар
Кемдәрҙән өйрәнә һуң?

Өләсәйем:
— Ҡоштар, балам,
Тыумыштан йырлай, — тине. —
Улар шулай тәбиғәтте,
Тормошто ҙурлай, — тине.

## БАЛ ҠОРТТАРЫ

Бал ҡорттары йырлап оса:
«Быз-быз, быз-быз, быз-быз-быз!
Ҡышҡылыҡҡа бал йыябыҙ,
Туп-тулы тырызыбыҙ...»



## ЯУАПЛЫ ЭШ

Минең атайҙың
Яуаплы эше:
Ул тәбиғәтте
Һаҡлаусы кеше.

Урманда уны
Таный һәр ағас:

Ҡарағай, ҡайын,
Уҫаҡ, ҡарағас.

Улар атайға
Әйтәләр: «Рәхмәт!
Яҡлаусы булғас,
Үҫеүе рәхәт».

## ӘСӘЙЕМӘ БҮЛӘК

Аҡланда ейәк йыйҙым...
Тулды минең силәгем —
Байрамға әсәйемә
Булыр минең бүләгем!

## СЕРЕМ ИТӘ АҠ БОЛОТ

Серем итә аҡ болот
Зәңгәр моңға төрөнөп,
Быны күреп бошондо,
Болон ҡуйҙы көрһөнөп:
— Эх, — тине, — бөгөн ямғырһыҙ
Ҡалдыра бит был беҙҙе...
Шул саҡ болот йылмайҙы:
— Шаярттым, — тине, — һеҙҙе.
Эй, ялт та йолт, ялт та йолт,
Гөрһөлдәне күк йөҙө,
Кинәнеп бар тәбиғәт
Ямғыр һыуында йөҙҙө!



## СИҢЕРТКӘ

Сиңерткә ойоҡ бәйләй,
Һаламдан энәләре,
«Тиҙ үк ҡыштар етер, — ти, —
Файҙаһы тейер әле».



## ЭЙ ШЫУАБЫҘ!

Рәхәтләнеп конькиҙа
Дуҫым менән шыуабыҙ,
Күҙгә кеүек ялтырап
Туңған беҙҙең быуабыҙ.

Ярышабыҙ кем уҙарҙан,
Арыу белмәй аяҡтар,
Беҙҙең күңелле тауышҡа
Гөр килә тирә-яҡтар!

## ЙӘШЕНГӘН АЙ

Абау, Ләйсән илай-илай
Ҡайтып инде урамдан.
Ни булған?
Әллә ҡурҡҡанмы
Ҡышҡы ыжғыр буранда?

Әсәһен күргәс тә ҡыҙый
Йәшен һөрттө, йылмайҙы,
Һәм зарланды: «Ҡара болот
Йәшерҙе минән айҙы!»



## ҺӨЙӨНСӨ

Һары сәсен тарай баҫыу,
Тараҡтары — алтындан.
Был мөғжизәгә һоҡланып,
Елдәр иҫеүҙән тынған.

Киске офоҡта нәжәғәй
Ҡамаштыра күҙҙәрҙе;
Ул һөйөнсө булып балҡый:
«Ҡаршылағыҙ көҙҙәрҙе!»

## ҠЫШҠЫ СЕЛЛӘ



Ҡышҡы селлә.
Өшөп-туңып
Ҡайтып киләм өйөмә.
Әйтерһең дә, ҡыш бейетә
Мине ҡырыҫ көйөнә.

Биткә ҡар ырғыта.
Көрттән
Ҡәртә ҡора юлыма...
Әлдә әсәй ҡаршы сыҡты,
Ни булды, тип, улыма?

## ҘУР ЯРҘАМ

Таң атҡансы ихатаға
Ҡарҙар өйөргән буран.
Гөлнур ҡар көрәргә сыҡты,
Көрәген тотто Урал.

Һә тигәнсә ихатаны
Таҙартты улар ҡарҙан.
Аталары әйтте: «Миңә
Күрһәттегеҙ ҙур ярҙам!»



## ЯҢЫ ЙЫЛ

Яңы йылға һанаулы
Ҡалды минуттар.
Бына хәҙер шыршыбыҙҙа
Ҡабыныр уттар.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Тупҡай . . . 3
Зәңгәр таҫма . . . 3
Ялҡау Гөлкәй . . . 3
Өләсәйҙә . . . 4
Өйрәндем эшкә . . . 4
Гөлдәр . . . 6
Рәсилә . . . 6
Тыуған көн . . . 6
Күбәләк . . . 8
Изге эш . . . 9
Һаҡта . . . 9
Карантин . . . 9
Алма . . . 11
Сәстәремде тарағас . . . 12
Ҡолонҡай . . . 12
Зөбәйҙә . . . 13
Балан . . . 13
Терпе . . . 13
Кәзә йыры . . . 14
Пар ҡанат . . . 14
Аҡ кәзә . . . 14
Себештәр . . . 15
Эшһөйәрҙәр . . . 15
Яҙ . . . 16
Сыйырсыҡ . . . 17
Тып та тып . . . 17
Һабантуйҙа . . . 17
Ямғыр . . . 18
Кис . . . 18
Ләйсән . . . 18
Ҡошсоҡ . . . 19
Бал ҡорттары . . . 19
Яуаплы эш . . . 19
Әсәйемә бүләк . . . 20
Серем итә аҡ болот . . . 20
Сиңерткә . . . 20
Эй шыуабыҙ! . . . 22
Йәшенгән ай . . . 22
Һөйөнсө . . . 22
Ҡышҡы сәлдә . . . 23
Ҙур ярҙам . . . 23
Яңы йыл . . . 23

*Литературно-художественное издание*

Для детей дошкольного возраста

**МАГАСУМОВА Файза Забировна**

**ОБЛАЧКО-ЗАСОНЯ**

Стихи

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Р. М. Зәйтүнова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректоры *З. М. Камалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 10.05.12. Форматы 60x90 $^{1}/_{8}$. Офсет ҡағыҙы. Балтика гарнитураһы.
Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 3,0. Шартлы буяу отт. 13,0. Иҫәп-нәшер таб. 1,94.
Тиражы 2000 дана. Заказ 120530.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының
Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.